*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*

# БАШҠОРТ ТАМҒАЛАРЫ. ТАМҒАЛЫ ЯҘЫУҘАР. БАЛБАЛДАР

## БАШҠОРТ ТАМҒАЛАРЫ

Башҡорттоң боронғо алфавиты, иҫке яҙма тарихы әлегә ныҡлап өйрәнелмәгән. Бының өсөн башта эпиграфик ҡомартҡыларҙы күндәмерәк тупларға, системаға һалырға һәм ентекләп тикшерә башларға кәрәк. Иң беренсе сиратта — яҙма билдәләрҙе, тамғаларҙы, табылған һәм һаҡланған боронғо яҙыу үрнәктәрен. Ошо йүнәлештә башҡорт тамғаларынан һүҙҙе башлау дөрөҫөрәк булыр.

Эпиграфист ғалимдар раҫлауынса, тамғалар боронғо кешеләрҙең тарих төпкөлдәренән үк әйбергә, ағасҡа, ташҡа сыйып йә соҡоп яҙған тәүге һыҙма һәм яҙма һөнәрҙәре ул. Шул традицияның эҙҙәре һәм эҙемтәләре беҙҙең быуаттарғаса килеп еткән.

Башҡорттар борон-борондан әйберҙәргә, ағасҡа, ташҡа тамға һалыр булған. Ул ниндәйҙер бер мәғәнәгә эйә йолаға, үҙенсә бер ҡанунға әйләнеп киткән. Уның мәғлүм бер тәғәйенләнеше, айышы билдәләнгән. Бер боронғо айышы ҡәүем, ҡәбилә булһа, аҙағыраҡ ырыу билдәһе рәүешен алған, буғай. Төрки уғыҙ хикәйәттәрендә Уғыҙ ҡағандың бер төркөм ҡәүемдәргә тамға, ағас, ҡош, оран исемдәрен билдә итеп тәғәйенләп биргәнлеге сағыла. Боронғо башҡорттар ҙа Уғыҙ ҡаған (хан) ҡулынан изге тамға, ағас, ҡош, оранға эйә булған, тиелә. Риүәйәттәр, тәуарихтар һөйләүенсә, был йоланы Сыңғыҙ хан да дауам итеп, башҡорт ырыу башлыҡтарына һәр береһенә тәғәйенләп тамға, ағас, ҡош, оран атап биргән. Йәғни был атамалар һәр ҡәүем, ырыуҙың атрибутына әүерелгән. Ҡош тәпәйен йәки ниндәйҙер һынды хәтерләткән тамғаларға мәжүсилек замандарынан ҡалған изге мәғәнәләр ҙә һалынған булһа кәрәк. Тамға ырыу эмблемаһы функцияһын үтәгән. Ырыу башлығы өсөн тамғаһы дәрәжә билдәһе байса булған.

XVIII—XIX быуаттарҙа башҡорттарҙа ырыуҙарҙың тарихи, социаль роле кәмей йәки тарҡала бара, ырыу тамғалары ла тарауланып, үҙ функцияларын нәҫел, ғаилә даирәһенәсә тарайта. Тимәк, башҡорт тамғалары хосуси милекселекте аңлатҡан тарыраҡ мәғәнәгә күсә. XIX быуаттың икенсе яртыһынан, тәғәйен 60-сы йылдарынан тамғалар нәҫел, ғаилә милкен күрһәтеп, ер-һыу биләмәләренә, малдарға, ҡаралтыларға, ҡорамалдарға, әйберҙәргә һәм башҡа милектәргә һалынған.

Элегерәк ырыу, ырыу-ара килешеү ҡағыҙҙарына ырыу, нәҫел-ғаилә тамғалары ла һалынған. Ҡул ҡуйыусы старшина, староста йәки ғаилә башлығы тамғаһын һалған тәҡдирҙә лә, ғәҙәттә, «тамғамды һалдым» тип яҙып та ҡуйған. «Ҡул ҡуйҙым», «тамға һалдым», тигән һүҙ яҙмала һәм лексиконда шулай нығынған. Тимәк, бындай саҡта тамға мөһөр билдәһе урынына ла йөрөгән.

Башҡорт ырыу тамғаларының тарихи-этнографик, тарихи-лингвистик һәм тарихи-эпиграфистик сығанаҡ булараҡ фәндә әһәмиәттәре бик ҙур. Уларҙың өс меңдән ашыу өлгөһө өлөшсә тарихи документтарҙа теркәлеп йәки һуңынанныраҡ ғалимдар тарафынан йыйылып, ҡағыҙға күсерелеп ҡалынһа ла тамғаларҙың тейешенсә өйрәнелеп, тасуирланып баҫтырылып сығарылмауы ғилми-тикшеренеү эштәрен әлегә киң йәйелдереп ебәрергә мөмкинлек бирмәй. Академик Раил

Кузеев хисабынса, хәҙер дүрт меңгә яҡын теркәлгән башҡорт тамғаларын бар.

Әлегә архивтарҙа һаҡланган башҡорт тамғалары үрнәктәренә, Д.Н.Соколовтың «О башкирских тамгах» тигән 1904 йылда баҫылған хеҙмәтенә, Раил Кузеевтың тарихи-этнографик китаптарындағы мәғлүмәттәргә таянып һәм үҙем археографик экспедициялар ваҡытында яҙып алған тамғаларға, һәүәҫкәр Иршат Ейәнбирҙиндең үҙе йәшәгән төбәктәрҙә күсереп алған ҡәбер таштарындағы башҡорт тамғалары каталогына нигеҙләнеп, башҡорт тамғаларын, унын эпиграфик үрнәктәрен бер аҙ иллюстрациялап күрһәтергә һәм бер тиклем күҙәтеүҙәр яһарға уй-ниәт.

Башҡорт тамғаларын ырыуҙар принцибынан бер нисә төргә бүлеп ҡарарға мөмкин. Һәр ырыуҙың график яҡтан үҙенсә, үҙ исемле тамғаһы бар. Нисә төрлө ырыу — шунса тамға.

Тамғаларҙы бер-береһенә яҡынайтҡан һәм бер система иткән уртаҡ һыҙаттары асыҡ. Башҡорт тамғаларына тышҡы яҡтан монограммаға оҡшаш тура һәм кәкре һыҙыҡтарҙың комбинация рәүеше хас. Улар хәрефтәрҙе йәки күпмелер дәрәжәлә иероглифтарҙы хәтерләтеп тора. Бына иң характерлы типтары, шәкелдәре:



Ырыуҙар буйынса төп типтары:
**ҡыпсаҡтарҙа:** (ҡушһыҙыҡ), (әүернә), (һәнәк), (йәйә);
**табындарҙа:** (түңәрәк), (сүмес), (ҡапҡа), (ырғаҡ);
**үҫәргәндәрҙә:** (ҡойошҡан), (әүернә төрө);
**бөрйәндәрҙә:** (тәҙрә), (тауыҡ тәпәйе), (ағылбай), (сүкеш);
**түңгәүерҙәрҙә:** (ярым ай), (ҡармаҡ), (салҡан ай);
**ҡатайҙарҙа:** (сүкеш), (балта), (дағa);
**мендәрҙә:** (кәләп);
**күҙәйҙәрҙә:** (тырма);
**юрматыларҙа:** (ҡабырға);
**әйҙәрҙә:** (дөйә), (уҡ);
**байларҙа:** (өҙәңге).

Тамғаларға, тышҡы оҡшашлыҡтарына ҡарап, исемдәр бирелгән. Башҡорт тамғаларының төрлө дәүерҙәрҙәге эволюцияһында ырыу тамғаларынан аймаҡ, түбә, йорт, ара, нәҫелнәсәп тамғаларына тармаҡланып, төп тамға рәүешен һаҡлаған хәлдә график яҡтан төрләнеп, вариацияланып, байығып киткәне күҙәтелә.

Бына төп ырыу тамғаларының вариацияланыу шәкелдәре:

төп тамға вариациялары



XVI быуатта башҡорт ерлегендә ижад ителгән «Сыңғыҙнамә» яҙма ҡомартҡыһында башҡорт бейҙәренә бирелгән ырыу атрибуттарына иғтибар итәйек. Сыңғыҙхан бейҙәргә «үҙ-үҙлегә тамға, ҡош, ағас, оран биреп, бау-бау халыҡ ҡылып ирде». Уйшын Майҡы бей һинең ағасың ҡарағас булһын, тамғаң һебертке булһын, тине. Мең һаҙаҡлы Урҙас бейгә ағасын — ҡайын, ҡошон — ҡарсыға, оранын — алас, тамғаһын — ҡош ҡабырғаһы тип, Тамъян бейгә ағасын — тирәк, ҡошон — ҡарға, оранын тутыя, тамғаһын — ырғаҡ тип, Ҡыпсаҡ бейгә ағасын — ҡарама, ҡошон — бөркөт, оранын — туҡсаба, тамғаһын — тараҡ тип, Юрматы бейгә ағасын — өйәңке, ҡошон — этәлге, оранын — аҡтиләк, тамғыһын — һәнәк тип, Муйтән бейгә ағасын — миләш, ҡошон — торна, оранын — байғун, тамғаһын — ҡойошҡан тип атап, һәр бер бейгә тантаналы рәүештә беркетеп сыға хан.

Был боронғо ҡулъяҙмалағы ырыу атрибуттары ҡыпсаҡ, табын, юрматы, мең, бөрйән, тамъян һ.б. ырыуҙарҙа беҙҙең быуатҡаса әллә ни үҙгәрмәй һаҡланып килгән. Шул ырыу башлыҡтарына, бүтән бейҙәргә бирелгән тамғалар ҡулъяҙмала шәкелдәре менән һүрәт рәүешле теркәлгән. Бына улар:



Төп тамғаларҙың экеренләп үҙгәреше, төрләнеше, вариациялары диакритик билдә рәүешендәге өҫтәмә һыҙыҡтар ҡушыу тәртибендә бара, байыға төшә.

Башҡорт тамғаларының эске үҙгәрешендә йәки төрләнешендә билдәле бер законсылыҡ күҙәтелә:

1. Төп ырыу тамғаһына диакритик билдә рәүешендәге һыҙыҡсалар өҫтәлә. Мәҫәлән,  (ҡапҡа тамға) өҫтәмәләре:  һ.б.

2. Төп тамғаны түңкәреү йә йығып һалыу рәүешендә биреү: мәҫәлән,  (һәнәк) = ,  (сүкеш) = 

3. Тамғаны ҡыйыҡайтып йә түңәрәкләберәк үҙгәртеү:  

4. Тамғаны ҡушарлау йә ҡушыу:  

5. Тамғаларҙы шылдырып берләштереү:  

6. Йәнәш ҡушарлау: 

Д.Н.Соколовтың «О башкирских тамгах» хеҙмәтенең «Труды Оренбургской ученой архивной комиссии» китабында (XIII том, 1904) ҡушымтала бирелгән башҡорт тамғалары таблицаһын килтерәбеҙ (*89-сы битте ҡара*).

Был таблицанан күренеүенсә, XX быуат башына тиклем һаҡланып килгән ҡағыҙға теркәлгән башҡорт тамғаларының ырыуҙар эсендә нисек төрләнеп, вариацияланып ғәжәйеп бай төрләнеш алғанлығы асыҡ рәүештә күҙ алдына баҫа. Был тамғалар ырыуара, аймаҡ, түбә, йорт, нәҫел тамғалары рәүешендә тармаҡланыуын да аныҡ күрһәтә.

Быуаттар дауамында тамғалар ырыу, аймаҡ, түбә, ара, йорт, нәҫел, ғаилә тамғаһы тармаҡтарынаса йәйелеп, малдарға инләп, әйберҙәргә, ҡорамалдарға, ҡаралтыларға ырып, ер-һыу биләмәләренә ҡыҙҙырып, солоҡтарға соҡоп, затлы кейем-һалымға ҡайып, ҡәбер таштарына ҡабалап һалынып булған. Заманалар үтеүҙән ҡаралтылар, бағаналар сереп, ҡорамалдар, кейемдәр туҙып, солоҡтар ауып тамғалары ла юҡҡа сыҡҡан. Ташҡа яҙылғандары ғына йөҙәрләгән йылдар һаҡланып ҡала алған. Ҡайһы бер туҙмаҫ затлы әйберҙәрҙә һаҡланған, рәсми ҡағыҙҙарҙа мөһөр, ҡултамға урынына һалынғандары беҙҙең көндәргә килеп еткән.

Башҡорт тамғаларын өйрәнеүҙә айырыуса ҡәбер таштарына соҡоп йә ҡалҡытып ҡабағалап яҙылған тамғалар ҙур әһәмиәткә эйә. Бындай эпиграфик билдәләр бик күптәнге замандарҙың эҙен, тамғаһын шул көйө тиерлек һаҡлауҙары менән ҡиммәтле.

Бына, мәҫәлән, Ейәнсура районы Үрген ауылынан һәүәҫкәр эпиграфист Иршат Ейәнбирҙин шул үҙе йәшәгән көньяҡ регион буйынса төҙөгән ҡәбер таштарындағы башҡорт тамғалары каталогы миҫалында ла төп ырыу тамғалары төрҙәренең һәм вариацияларының төрлөләнгән асыҡ күрә һәм үҙенсә системалай алабыҙ. Каталогҡа теркәлгән характерлы тамғалар шундайҙар: төп тамға , вариациялары 





Ә был региондағы үҫәргән һәм ҡыпсаҡ ырыуҙарының тамғалары ҡәбер таштарында төрлө вариацияларында күп төрлө һалынған. Бына улар:

Үҫәргәндәрҙең төп тамғаһы , ҡәбер таштарындағы вариациялары:



Ҡыпсаҡтарҙың төп тамғаһы , ҡәбер таштарындағы вариациялары:



Йыйып әйткәндә: башҡорт тамғаларының башҡорт ырыуҙарының тарихын, уларҙың миграцияһын, тарихи-этнографик үҙенсәлектәрен өйрәнеүҙә мөһим сығанаҡ булып тороу менән бергә тарихи-эпиграфистик ҡомартҡы булыу йәһәтенән милли граффитиологияны, йәғни һыҙма, яҙма ғилемен тикшереүҙә ролдәре ғәйәт ҙур.

## ТАМҒАЛЫ ЯҘЫУҘАР

Милли һыҙма һәм яҙма тарихыбыҙҙың боронғо юл башы башҡорт тамғаларында яталыр ҙа әле, моғайын. Боронғо ҡанбабаларыбыҙ ҡомға, ағасҡа, ташҡа, мәмерйә диуарҙарына, ҡаяларғаниҙер менән сыйып йә соҡоп



Таблицаға төшөндөрмә:

ҡыпсаҡ тамғалары: (I, II (1-35), V (1-20), VI, VII);

бөрйән тамғалары: (X (1-18, 19-36), XI (1-23, 24-41), XII (1-43), XIV, XV, XVII— XIX);

табын тамғалары: XIII, XIV;

үҫәргән тамғалары: XX, XXI (1-19);

түңгәүер тамғалары: XXII— XXVII, XXV (23-34).

яҙырға, тамға һалырға тырышҡан, ниндәйҙер серле ғибәрәләр, һүрәттәр төшөргән, нимәлер аңлатырға, иҫтәлек ҡалдырырға ниәтләнгән. Шулай таштарҙа, ағастарҙа, ҡаяларҙа төрлө билдәләр, һындар, һүрәттәр ҡомартҡы булып ҡалған. Шүлгән, Мораҙым мәмерйә тамғалары һәм һүрәттәре генә лә был хаҡта күп нәмә аңлаталыр.

Тамғаның бит һыҙымы ғына түгел, шуның эске мәғәнәһе, ниҙер ишаралаған теле лә бар. Шуны уҡыр, төшөнә белмәк кәрәк.

Тамға — ул үҙ алдына һыҙма символика. Төшөнгәнгә нәмәнендер ишараһы һәм исеме лә. Тамға, билдәләрҙән шулай яҙмалар барлыҡҡа килгән. Бер тамға янына икенсе, өсөнсө төрлө тамға өҫтәлһә, улар һүҙгә, хәрефкә әйләнгән: шулай алфавит, яҙма хасил булған.

Башҡорт тамғалары ла боронғо хәрефтәребеҙ, алфавитыбыҙ башы ул. Быны асыҡлар өсөн асҡысы табылған боронғо төрки уртаҡ яҙма ҡомартҡыларыбыҙ орхон-йәнәсәй руник ташъяҙмаларға мөрәжәғәт итәйек (*91-се битте ҡара*).

Был таблица буйынса сағыштырғанда башҡорт тамғаларының орхон-йәнәсәй руник хәрефтәренә оҡшаш ҡына түгел, күптәре типә-тиң килеп торғаны айырым-асыҡ. Бындай оҡшашлыҡ йәки типә-тиңлек ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, хаҡас, тағы Себер төркиҙәренең тамғалары өсөн дә хас.

Ошонан сығып, төрки эпиграфикаһы, боронғо төрки ташъяҙмалары менән шөғөлләнгән ғалимдарҙан Н.Г.Маллицкий «О связи тюркских тамг с орхонскими письменами» (1897—98) тигән, Н.А.Аристов «Опыт выяснения этнического состава киргиз-казахов Большой орды и каракиргизов», Д.Н.Соколов «О башкирских тамгах» (1904) тигән хеҙмәттәрендә орхон-йәнәсәй руник ташъяҙмаларының төрки тамғалар нигеҙендә килеп сығышы концепцияһын ҡуйҙылар. Был ҡарашҡа бүтән байтаҡ ғалимдар ҡушылды. Шул уҡ ваҡытта В.Томсен, Р.Готьо, В.Радлов, С.Малов һ.б. ғалимдар орхон-йәнәсәй руник яҙмаларының сығышын соғдий, арамий, пехлевий алфавиттары менән бәйләнешле икәнлеген алға һөрҙөләр. Хәҙерге төрки ғалимдарҙан С.Кляшторный, А.Аманжолов, А.Эмре, Ғ.Мусабаев һ.б. боронғо соғди, арамий алфавитының төрки телдәренә яйлаштырған саҡта төрки тамғалар графикаһына таяныу фекерен раҫлайҙар. Төрки эпиграфистарҙың төп фекере төрки яҙмаһы автохтон, милли-ерле күренеш икәнгә ҡайта.

Эпиграфистар һәм лингвистар ҡаяларға, таштарға төшөрөлгән тамғаларҙы, тамға яҙыуҙарҙы, төрлө һүрәт һәм символик билдәләрҙе өйрәнеп, тамғалар эволюцияһында яҙыу элементын алған пиктограммаларҙан һүрәт, символ, яҙма рәүешендәге идеограммаларға, унан идеографик мәғәнәһен һаҡлаған тамғалы алфавитҡа килеү законсылығын нигеҙләйҙәр. Асылыкүл буйындағы таштарға, Бөрө районындағы Ыласын тау ҡаяһына сыйып яҙылған тамғаларға, тамғалы яҙыуҙарға, төрлө символик мәғәнәле һүрәттәргә ҡарғанда ла пиктограммаларҙың идеограммалар менән ҡушылып китеүен, ғәжәйеп төрлө эпиграфик яҙмалар тупланышып күҙәтергә мөмкин. Тик уларға тел асҡыстарын табаһы ғына бар әлегә.

Ҡандракүл буйы тауының тамға яҙмалар менән тулы булғаны өсөн халыҡ уны Яҙматаш тип атаған. Белорет районында Яҙыулы тау төбәге бар һ.б.

Ғалимдар төрки яҙыуының беҙҙең эраға тиклем үк барлыҡҡа килеүен билдәләйҙәр. Ҡаҙаҡ эпиграфисы А. Мәхмутов «Ҡаҙағстан эпиграфикасы» китабында шундай һығымта яһай: «Беҙҙең эраға тиклемге III—I быуаттарҙағы уйсындар менән ҡанлыларҙың союздаш саҡтарында уҡ яҙыу булған. «Ҡаңлы батшаһының яҙма кодексы бар икән, ул үҙ урҙаларында һаҡлана» («Ҡазаҡ ССР-ы тарихы, I том, Алматы, 1987, 56-сы бит). Бындай хәбәрҙәр төрки халыҡтарының тәү алфавитының нигеҙе саҡ-уйсын замандарында һундар дәүеренән күп борон ҡалыплашҡанын аңлата»[1].

Был ғалимдар ҙа боронғо төрки руник яҙмаларын тикшереп, «боронғо орхон яҙыуындағы 150 билдәнең туҡһанлабы төрки халыҡтарының борон заманда ҡулланған тамғалары менән тиңдәш, бер-береһе менән оҡшаш, типә-тиң киләләр», — тип яҙалар (алдағы китап, 106-сы бит).

Тамға берәү булғанда — тамға, икәү булғанда — хәреф, өсәү булғанда яҙма тиҙәр.

[1]Г.Мусабаев, А.Махмутов, Г.Айдаров. Казакстан эпиграфикасы — Эпиграфика Казахстана. Выпуск I, Алматы, 1971, 100-се бит.

Тамғаларҙың әйберҙәргә, һауыт-һабаларға, йөҙөк-беләҙектәргә, көҙгөләргә атап һалыныуынан, бүләк әйберҙәрендә ниндәйҙер мәғәнә аңлатыуынан ике-өс тамғаның рәттән яҙыуға оҡшап йә әйләнеп китеүе лә бик тәбиғи. Тамғалы яҙыуҙар башта хәреф рәүешен алмағас, уларҙың мәғәнәһен иероглифтар кеүек асырға һәм аңларға тура килгәндер. Был традиция алфавит барлыҡҡа килгәндән һуң да күп быуаттар дауам иткән булырға тейеш.

Тамғаларҙың байтағы хәрефкә әүерелеп алфавитҡа күскәс тә үҙ алдына тамғалығын юғалтмай ҡалғандары ла булған, хәҙер ҙә бар, улар әүәлге функцияһын һаҡлаған. Быны бик күп эпиграфик ҡомартҡылар раҫлай. Төрки ҡәбер таштарында тамға төрки йәки ғәрәп яҙыуының органик бер өлөшө, компоненты булып йөрөй. Ҡаяларҙағы тамғаларҙа, тамғалы яҙыуҙарҙа йәнәш антропоморф (кеше) йә зооморф (йәнлек) һындары, хатта үҙенсә сюжетлы һүрәттәр осрай.

Төрки руник ташъяҙмаларҙың һаҡланып ҡалған төп үҙәктәре Азияла — Алтайҙа, Монголияла, Ҡырғыҙстанда, Ҡаҙағстандың көнсығышында. Айырым үрнәктәре йәки рунаға оҡшаштары Көнсығыш Европала, Волга, Дон буйҙарында, бер нисәләбе Көньяҡ Уралда, Төньяҡ Кавказда, Дунай буйында табылған. Улар-

ОРХОН-ЙӘНӘСӘЙ РУНИК ХӘРЕФТӘРЕ
ҺӘМ БАШҠОРТ ТАМҒАЛАРЫ ТАБЛИЦАҺЫ

I II III



I — Хәҙерге хәреф, өндәр
II — Орхон-йәнәсәй руник хәрефтәре
III — Башҡорт тамғалары

ҙың күбеһе әлегә уҡый алынмаған йәки гипотетик рәүештә генә уҡылған.

Башҡортостанда ла руник йә рунаға оҡшаш эпиграфик яҙмалар табылғылай башланы. Уларҙың иң серлеһе 1973 йылда археографик экспедиция ваҡытында Саҡмағош районында беҙҙең тарафтан иғтибар ителеп һәм тәүләп тасуир бирелгәне Ҡалмаш ташъяҙмаһылыр, моғайын. Уны эпиграфистар әлегә танып уҡый алғандары юҡ. Ҡалмаш таш яҙыуы үҙендә гизле сер һаҡлай һаман.

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан археологтары таштарға, әйберҙәргә соҡоп йә сыйып яҙылған тамғалы яҙыуҙар тапты.

Ейәнсуранан Иршат Ейәнбирҙин ҡәбер таштарынан бик күп тамғалар, тамғалы яҙыуҙар күсереп алып, үҙе атағанса, «Башҡорт граффитиҙары каталогы»н, «Башҡорт граффитиологияһына инеш» альбомын төҙөп ҡараны. Шул күсермәләр араһында бер нисә тамғалы яҙма йәки руникаға оҡшаш яҙмалар иғтибарҙы тарта. И.Ейәнбирҙин һыҙмаһынса бына шуларҙың үрнәктәре:

1.  Ейәнсура районы Үрген ауылы янында табылған ҡабырсаҡ аҡсалағы тамғалы яҙыу.

2.  Күгәрсен районы  Санъяп ауылы зыяратынан күсереп алынған.

3.  Шул уҡ зыярат ҡәбер ташынан.

4.  Үрген ауылының Баланлытауҙағы Ҡорбан ташындағы яҙма.

5.  Үргендең Ҡушай яланындағы ташта.

6.  Урыҫ Үргенендә табылған суйындағы билдәләр.

Иршат Ейәнбирҙин был тамға яҙыуҙарҙы орхон-йәнәсәй руник алфавитына һәм үҙе төҙөгән «Башҡорт яҙмалары һәм һүҙлеге» асҡысына таянып уҡырға тырышып ҡарай. Уларҙан ниндәйҙер мәғәнәләр килтереп сығарған кеүек. Ләкин быларҙы әле бәхәсле фараз, фәнни термин менән әйткәндә, текстарға гипотетик интерпретация ынтылышы, тип һанарға ғына мөмкин.

Археологтар тарафынан табылған саҡтар дәүере ҡаҙанына яҙылған руник яҙма иғтибарҙы биләй:

7.  Быны «Ака снка ос(к)» — тип уҡыйҙар. Йәғни «Аға һиңә усаҡ» тигән мәғәнәлә.

8.  Быныһы археолог Нияз Мәжитов Охлебин курганынан тапҡан беҙҙең һөйәк һабына яҙылған тамға яҙма. Уны И.Ейәнбирҙин «Бһҡсҡа бһҡсҡ» тип уҡый һәм «Бысаҡҡа бысаҡ» мәғәнәһен сығара.

9. Ҡалмаш ташъяҙмаһының күсереп алынған схематик яҙмаһын килтерәбеҙ.



Ҡалмаш ташына соҡоп яҙылған был билдәләрҙең тамғалар йыйылмаһымы, әллә руник яҙмалармы икәнлеген асыҡлау, руник яҙма икән, уны уҡыу эпиграфист һәм лингвист ғалимдарҙың бурысы булып ҡала.

Һәр хәлдә, әле килтерелгән һәм килтерелмәгән таштарҙағы, әйберҙәрҙәге рунаға оҡшаш яҙмалар ғалимдарыбыҙҙан үҙ серҙәрен асыуҙы көтә. Ул саҡта беҙ башҡорт тамғаларының төрки руник яҙмаларына мөнәсәбәтен дә, бәлки боронғо башҡорт яҙмаһының башланғыстарын, беҙҙең эра башындағы һәм унан арыһындағы тарихы эҙҙәрен дә юллар һәм асыҡлар инек.

## ҠЫПСАҠ-БАШҠОРТ БАЛБАЛДАРЫ

Эпиграфик ҡомартҡыларҙан ҡәбер таштарына төшөрөлгән тамғаларҙың, яҙыуҙарҙың ниндәй дәүерҙәргә ҡараууын һәм таралыш ареалын билдәләгәндә ҡыпсаҡ, ҡыпсаҡ-башҡорт таш

**Ҡәбер таштарындағы тамғалар, яҙмалар**



балбалдар мөһим әһәмиәткә эйә. Ҡәбер таштары итеп ҡуйылған яҙыулы боронғо таш һындар, балбалдар үҙҙәренең рәүеше яҙмаһы менән ҡанзамандарҙағы тарихты күргәҙмәле һөйләп, ишаралап тора.

Боронғо төрки ҡәбер таштарының ислам дәүеренә тиклем дәүмәле, рәүеше, биҙәлеше, билдәләре йәһәтенән осорҙарына ҡарай үҙ үҙенсәлектәре бар. Борон замандарҙа хандар, олуғ бейҙәр өсөн бейек ҡорғандар (курган) өйөп, ҡәбер өҫтөнә бик дәү таштар ҡуйғандар. Уларҙың өҫтөнә, ҡабырғаларына ҡабағалап тамғалар һалынған. Бындай таш һындар янында мәғлүм бер йолалар, ғибәҙәттәр ҡылыныр булған. Олуғ йәндәрҙе изгеләштереп таш һындарына бағынғандар.

«Һынташ» тигән башҡорт легендаһы шундайҙарға бағлы бер сюжетты һөйләй:

«Борон замандарҙа ошо беҙҙең ауыл урынында бер дәү һынташ булған, тиҙәр. Уның һыны кешегә оҡшашыраҡ булған икән: башы, ҡулдары, биле беленеп торған. Күрәһең, уны шулай итеп юнғандар. Ташында тамғаларға оҡшаған ниндәйҙер яҙыуҙары ла бар ине, тиҙәр. Ул бер арҙаҡлы изге әҙәмдең ҡәберенә ҡуйылған. Һынташ төнөн яҡтыртып торор булған, тиҙәр. Кешеләр уны шуға изге таш тип иҫәпләгән. Ул таш бынан йөҙ-йөҙ илле йылдар әүәл генә имен ине әле, тиҙәр ҡарттар. Бер саҡ ул, туҙыпмы, нисектер, ярылып төшкән. Шунан һуң уның төнөн баҙлап торор ҡөҙрәте лә бөткән, ти. Үҙе лә аҙаҡ әллә ҡайҙа юҡ булған.

Бына шул таштан ҡалған беҙҙең ауылдың иҫке Һынташ исеме» (Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө, 1980, 130—131-се биттәр).

Башҡорттар бындай боронғо ҡәбер таштарын һынташтар, торataштар, ташбилгеләр тип атап йөрөткәндәр. Ә төрки ҡағанаты дәүерҙәрендәге ҡағандар, хандар ҡәбере өҫтөнә ҡуйылыр яҙыулы ғәләмәт дәү таштарҙы бәңге (мәңге) таштар, тигәндәр. Орхон-йәнәсәй бәңге таштары, уларҙың ташъяҙмалары тап шундайҙар.

Олуғтар ҡәберендәге руник яҙыулы дәү-дәү һынташтар тәңрелек дине дәүеренә хас. Гүр эйәһе ҡағанға дастандарға тиңәлер дан һүҙен оло таштарҙы тултырып соҡоп яҙыу улар исемен, шанын мәңгелек итеү маҡсатынан эшләнгән. Улар шуның менән монументаль яҙыу, үҙе бер сәнғәт билдәһе, заманаларға бирешмәҫ таш ҡомартҡылар дәрәжәһен алған.

VII—IX быуаттарға ҡараған орхон-йәнәсәй руник яҙмалары — төрки халыҡтарының уртаҡ ташъяҙма йәдкәре. Ул боронғо алфавиттың нигеҙендә төрки тамғалары ята. Быны төрки яҙмасылығының классик дәүере тип атарға була.

Боронғо Ҡытай сығанаҡтары төрки ҡәбиләләренең беҙҙең быуатҡа тиклем үк III—II йөҙйыллыҡтарында үҙ яҙмалары булыуын күрһәтәләр. Ул яҙма орхон-йәнәсәй, талас алфавитына яҡын. (Эпиграфика Казахстана, выпуск I, Алма-Ата, 1971, стр. 7, 13). Күрәһең, беҙҙең быуат баштарында Һун, Ҡаңлы, Ҡатай уйсын кеүек төрки ҡәбиләләрҙең көнсығыштан көнбайышҡа күпләп күсенә башлау дәүерҙәренән ул яҙма мәғлүм бер камиллашыу кисерә-кисерә орхон-йәнәсәй, талас алфавит, яҙма традицияһына күскән, яйлап Көнсығыш Европаға, Төньяҡ Кавказ буйҙарына ла таралған.

Күп дәүерҙәр үтеү һәм алмашыныу менән бергә ташъяҙмаларҙың таштарының дәүмәле һәм формалары ла үҙгәрә, алмашына килгән. Беҙҙеңсә, төрки ташъяҙмаларының һәм таштарының үҙгәреш эволюцияһын дүрт ҙур дәүергә бүлеп ҡарарға мөмкин:

1-се, боронғо дәүер, беҙҙең эраға тиклем III—I быуаттар, беҙҙең эраның I—V быуаттары;

2-се, орхон-йәнәсәй ташъяҙмалар дәүере, VI—IX быуаттар;

### Бороңғо дәүер кәбер таштары




### Орхон-йәнәсәй ташъяҙмаларынан






### Төрки ҡағанат дәүере







### Ҡыпсаҡ дәүере балбалдары




### Ислам дәүере кәбер таштарынан






3-сө, ҡыпсаҡ дәүере, IX—XIII быуаттар;

4-се, ислам дәүере, XIII—XIX быуаттар.

Был бүленеш сиктәре хронологик яҡтан, әлбиттә, шартлы. Күрһәтелгән дәүерҙәр араһында яҙма традициялар, ташһындар үҙгәрә һәм алмашына барһалар ҙа, икенсе дәүерҙәрҙә элекке яҙма һәм формалар яңы яҙма һәм формалар менән байтаҡ ваҡыт йәнәш тә йәшәп килгеләйҙәр.

Беренсе боронғо дәүерҙәге бик аҙ ғына фрагменталь рәүештә һаҡланып ҡалған төрки яҙмалар күберәк тамғалар, бер нисә билдә, һүҙ, хәреф рәүешендә булһа, таш һындары ла, бәлки, күбеһе ватылғыланыуҙан йә ергә убыуҙан ваҡтар (таш бағана, күпмелер кеше һыны, кеше йөҙө билдәләре рәүешлеләр).

Икенсе дәүер. Орхон-йәнәсәй, бүтән төрки ташъяҙмалар. Төрки алфавиттың һәм яҙманың камиллашып еткән классик дәүере. Күлтәгин: Төнйогүк, Билге ҡағандарға бағышланған яҙмалар.

Ташһындары ҙур-ҙур текстарҙы, дастандарҙы һыйҙырыр монументаль дәү форманы ала, таштарында яҙылғанса, бәңге билдә һынына, һәйкәлгә оҡшай. Монументаль форма менән бергә кеше һынына тартым, кеше йөҙөн, кәүҙәһен яһаған һындар ҙа күренгеләй.

Өсөнсөһө — ҡыпсаҡ дәүере. Төрки ташъяҙмаһының күп текслы классик яҙмалары бөтә. Тамғалы йә ҡыҫҡа яҙыулы яҙмалар күбәйә. Асылда, классик ташъяҙманы ҡағыҙға яҙыу алыштыра.

Ташһындарҙың формалары, шәкелдәре ныҡ үҙгәрә. Кеше һынын һүрәтләү алға сыға. Ул үҙе бер оҙон дәүер эсендә бер нисә осорҙо кисерә. Тәүге осорҙа ташһындар күпмелер кешегә оҡшаш йәки кеше һынлы, асыҡ йөҙлө, күҙҙәре, танауы, ауыҙы, биттәре яҡшы беленеп торһалар ҙа әле схематик рәүешлерәктәр. Икенсе осорҙа инде кешенең башы, йөҙө, кәүҙәһе, ҡулдары асығыраҡ, матурыраҡ яһала, сәнғәтсә һәйкәлгә оҡшай. Өсөнсө осорҙа иһә кеше һындары, ир-ат һыны айырым, ҡатын-ҡыҙ һыны айырым һынландырылып, баш, бит, йөҙ, кәүҙә, һын, ҡул-аяҡтар нескәләп сәнғәтсә эшләнә, һын ысын сәнғәт, статуя юғарылығын ала. Икенсе, өсөнсө осорҙа яһалған ташһындар гүр эйәһе хандарға, олуғ бейҙәргә бағышланыуы менән шулай сәнғәт кимәлендә башҡарылған булырға тейеш. Дүртенсе осорҙа, татар-монгол яуҙарынан һуң ҡыпсаҡ хандарының дәүерҙәре уҙғас, монументаль сәнғәт формалары юғала, һындар ябайыраҡ, кескәйерәк итеп ҡуйыла башлай. Кеше һынлы, асыҡ йөҙлө һынташтар ислам дәүерендә лә байтаҡ ғүмерҙәр һаҡланып килә. Был һындарҙы ҡыпсаҡтар борондан балбалдар тип атай. Урыҫтар «каменные бабы» тип йөрөтә.

Ислам дәүере. Төркиҙәр араһына ислам дине ныҡлап урынлашҡас, төрки руник, уйғыр яҙыуы ғәрәп яҙыуы менән алмашына. Элеккесә таштарға, ташһындарға тамғалар һалыу йолаһы һаҡлана. Ислам таштарға кеше һындарын юныуҙы һәм яһауҙы тыя. Әммә дөйөм кеше һынына оҡшашлыҡ һаҡлана һәм күпмелер тотола барыбер.

Хандар, олуғ бейҙәр, аҫыл заттар өсөн яһалған ҡыпсаҡ балбалдары ғәҙәттә ҡалҡыу ергә тағы бейек балсыҡ, тупраҡ өйөп яһалған ҡорғандар өҫтөнә ҡуйылыр булған. Хан, аҫыл зат балбал һәйкәлдәре изге һаналыр һәм һаҡланыр бер табыныу урынына әйләнгән. Хандарға атап яһалған балбал статуялар культ объекты ролен тотҡан. Статуяның нигеҙ ташына (пьедесталына) яҙмалары яҙылыр йәки берәй символик һүрәт төшөрөлөр булған. Мәҫәлән, Херсон ҡалаһы музейында һаҡланған балбал статуяның нигеҙ ташына тыу тотҡан һыбайлы һалдат һүрәте яһалған.

Днепрҙың түбәнге ағымы, Ҡара диңгеҙ буйы ерҙәрен биләгән Башҡорт хандың үҙ биләмендә иң бейек ҡорғанда уға шунса сәнғәт юғарылығында балбал һәйкәл ҡуйылғандыр тип фараз итергә кәрәк. Ул һәйкәл Украиналының шул көньяҡтағы ҡалаларының музейында һаҡлана булырға тейеш. Беҙҙең археологтар, этнографтар уны юллап, тикшереп асыҡлай алһалар, был ҙур ғилми табыш булыр ине тарихыбыҙ һәм скульптур сәнғәтебеҙ өсөн.

Татар-монгол һөжүмдәре һөҙөмтәһендә XIII быуатта Дешт-Ҡыпсаҡ иле, уның халыҡтары ҡыйратылғас, ҡыпсаҡтарҙың күп кенә өлөшө Дунай аръяҡтарына, Волга, Урал буйҙарына

ҡасып тарала, Кавказ тауҙары эсенә һыйына. Татар-монголдар хакимлығы, бигерәк тә Рус дәүләте нығына башлағас, ҡыпсаҡ балбалдарын ҡырағайҙарса ватып-емереп, ҙур-ҙур таштары, балбалдары сиркәү, йорт нигеҙҙәренә һалып тәләф ителә.

Урал буйҙарына ҡасҡан ҡыпсаҡтар башҡорт туған ырыуҙары менән аралашып, үҙҙәренең таш балбалдар ҡуйыу традицияһын дауам итә. Әммә улар инде хандарға йәки олуғ бейҙәргә түгел, кескәйерәк турәләргә йәки абруйлыраҡ кешеләргә ҡуйылыр балбалдарға әүерелгәс, кескәйрәк һәм ябайыраҡ итеп яһала. Кеше һыны, бит йөҙө, ҡул-аяҡ һыҙаттары һаҡлана. Ләкин заманалар үтеү, ислам нигеҙҙәре нығыныу менән кеше һынлы таштар ҡуйыу туҡтала, әүәл-әүәлдән ҡуйылғандары туҙа йәки ватыла, юҡҡа сыға бара. Тарихи Башҡортостан территорияһында хәҙер ул ҡыпсаҡ-башҡорт балбалдарының шул ватылыу, емерелеүҙән нисектер һаҡланғылап ҡалғандары табылғылай. Шуларҙың бер нисәһе һүрәттә күрһәтелә.

Ислам дине тарафынан ҡәберҙәргә кеше һынлы, һүрәтле таштар ҡуйыу тыйылғас, башҡорттар кеше һынын хәтерләтер ҡарағусҡыл күкһел ҙур ҡолпо таштар ҡуйыр булғандар ҡәберлеккә. Улар балбалдарҙың ныҡ үҙгәртелгән бер төрө булып оҙаҡ һаҡланып килгән.

Башҡорттар боронғо ташландыҡ заяраттарҙан балбал таштарын ҡаҙып алып, унда кеше йөҙөн күрһәткән билдәләрен боҙоп, яңы ҡәбер таштары итеп тә ҡулланғандар. Бер боронғо балбал ташты ике-өс тапҡыр ҡәбер ташы итеп файҙаланыу хәлдәре осрай. Иршат Ейәнбирҙиндың көньяҡ Башҡортостан зыяраттарынан күсереп алған һәм төҙөгән каталогтарында шундайҙарҙы әллә күпме табып була.

Шуныһы ла мөһим һәм ҡыҙыҡ, бер нисә тапҡыр ҡәбер ташы итеп файҙаланылған бындай балбалдарҙа хатта боронғо төрки яҙма ҡатламын күрергә, ҡыпсаҡ дәүере билдәләрен, кеше һындарын асыҡ танырға, аҙаҡ ислам дәүере өсөн хас ғәрәпсә яҙмаларҙы еңел уҡырға мөмкин. Ана ҡалай итеп ҡәбер таштары ла нисәмә дәүерҙәрҙе үтә ала икән дә, шул дәүерҙәрҙең яҙма эҙҙәрен һаҡлап ҡала икән. Мәҫәлән, Ҡалмаш ташы боронғо тамға яҙыулы ҡулланылышынан һуң, икенсе ҡатына ғәрәп яҙыулы ҡәбер ташы итеп тә файҙаланылған. Ул һуңғы ҡатламы асыҡ уҡыла: «Буға уғлы Күкләй билгесе тарих ете йөҙ ҡырҡ етедә». Йәғни был яҙыу һижри менән 747 йылда яҙылған. Милади хисабынса 1346 йыл XIV быуат уртаһы яҙмаһы. Ә тамғалар йәки тамға яҙыуҙар бынан күпкә боронораҡ соҡоп яҙылған.

Борон-борондан дала ерҙәрендә йәшәгән йәки таш ҡуйҙырырға хәлдәре етмәгән кешеләр зыяраттарҙа таш урынына бик тиҙ сереп бармаҫ ҡарағас, имән кеүек ағастарҙан ҡәберҙәргә ағас бағаналар ҡуйыр булғандар. Ҡыпсаҡ дәүерендә ул бағаналар, таш һындар кеүек, кеше һынына оҡшатып юнылған, кеше йөҙө, ҡулаяҡтары ағасҡа соҡоп килештереп яһалған. Уларҙың ҡайһы бер үрнәктәре Рәсәй дәүләт музейҙарында осрай.

Ошо күҙәтеүҙәрҙән сығып, шуларҙы айырып әйтке килә: башҡорт эпиграфияһы, милли яҙма тарихын киңерәк һәм тәрәнерәк өйрәнеү өсөн түбәндәге мәсьәләләргә иғтибар итергә кәрәк:

1. Эпиграфик ҡомартҡыларҙы йыйыу, системаға һалыу һәм үрнәктәрен баҫып сығарыу эштәрен тиҙләтеү.

2. Башҡорт эпиграфикаһын өйрәнгәндә тамғаларҙы, таштағы яҙыуҙарҙы, таш һындарҙы, балбалдарҙы, йәғни тикшеренеү объектын бер бөтөн комплекс рәүешендә ҡарау тарихи-сағыштырма, комплекслы методтарҙы киң ҡулланыу бик мөһим.

3. Эпиграфиканы, башҡорт яҙмаһын, һынлы сәнғәтте тикшереүҙә археолог, эпиграфист, этнограф, лингвист, сәнғәт белгестәренең берлектәге хеҙмәтен, коллектив ғилми-тикшеренеү эшен юлға һалыу ҙа ҙурыраҡ уңыштарға килтерер ине.

